*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Уралдың күк ынйыһы



## Таш быуат кешеләре йәшәгән

Донъяла ун мең, йөҙ мең, миллион йыл йәшәгән күлдәр бар. Көньяҡ Уралдың Яйыҡ йортондағы Оҙонкүлдең ҡасан барлыҡҡа килеүен Хоҙай тәғәлә үҙе генә беләлер. Күл ситтәренең үҫемлектәр менән ҡапланыуы, ятҡылығында шифалы батҡаҡ, балсыҡ, ылымыҡтар күплеге уның ололоғона, олпатлығына ишаралай. Шул да мәғлүм, Көньяҡ Уралдағы Өргөн, Ҡарағайлы, Оло Асыуҙы, Мауыҙҙы күлдәре кеүек, Оҙонкүл тектоник юл менән, йәғни ер ҡабығының ҡуҙғалышы һәм үҙгәреше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Археологик эҙләнеүҙәр күрһәтеүенсә, бында таш быуат осоронда, беҙҙең эраға тиклем III мең йыллыҡта уҡ Әҙәм нәҫеле көн күргән. Күлдең "Морат" тигән урынында ҡарағусҡыл сейә һыҙатлы, ҡан ҡыҙыл, ал ҡыҙыл юлаҡлы зәңгәр-күк һәм йәшелһыу йәшмәнән эшләнгән егерме меңдән ашыу көнкүреш кәрәк-ярақтары, хеҙмәт, һунар ҡоралдары, эшкәртеү ҡалдыҡтары табылған. Һөңгөнөң, бысаҡтың йәнлеккә ҡаҙалған осо ҡан ҡыҙыл төҫтәге йәшмәнән яһалған. Балсыҡтан әүәләп көршәк эшләргә өйрәнгәнсе, мал-тыуарҙы эйәләштергәнсе үк ҡанбабалар йәшмәнең хозурлығына, ныҡлығына иғтибар иткән һәм уны көнитмештә ҡулланған. Тораҡта йәшмә әйберҙәр өйөлөп ятҡан. Ер өйҙәрҙең стеналары бер метр бейеклектә яҫы таштарҙан һалынған. Йәшмәнән яһалған нәмәләр йәнтөйәгебеҙ Уралда таш эшкәртеү сәнғәтенең быуаттар төпкөлөнә барып тоташыуы тураһында һөйләй.

Шулай итеп, Оҙонкүлдең тарихы таш быуаттан башлана. Бик күп хәл-ваҡиғаларҙы, серҙәрҙе үҙенә йомған ул. ”Эх, шул серҙәрҙе асырға ине”, — тип йөрәкһенәһең. Күпме асылдар асылыр, беҙҙең заман кешеләренә аҫыл мәғлүмәт, фәһем биргән күренештәр күҙалланыр ине. Ҡанбабаларҙың ғаләм, тәбиғәт менән аһәңле йәшәгәне, йәнтөйәккә мәрхәмәтле мөнәсәбәте, тормош-йәшәйешкә ҡарашы, булмышы, Оҙонкүлдә йәшмәнән яһалған ҡоралдарҙың Тубыл йылғаһы буйында табылғаны... Теле булһа, һөйләр ине хәтирәләрҙе, ғибрәтле хәлдәрҙе. Һөйләр ине...

## Йәннәттәй йәмле, ожмахтай изге

Башҡорт ҡурайы үҫкән, таш еләге, ер еләге, әберсәһе, сейәһе тамылйып бешкән, әлмороно, энәлеһе (дунала) тәңгә им биргән тауҙар иле! Аратүбә, Оҙонғыр, Остобейек, Торһай... Үҙәндәрендә Һаҡйылға, Һарғамыш, Көсөкбай, Тәкәлек һыуҙары сылтырай. Тирә-йүнгә еләҫлек бөркөп, һауаны сафландырып Оҙонкүл йәйрәп ята. Яр буйҙарының һыҙаты — ун ике саҡырым самаһы. Һыуы ғәйәт йомшаҡ, тәнгә сихәт, йыуһаң — сәсең ебәк һымаҡ. Йәйен — өҫтө йылы, төбө — һалҡынсараҡ. Бит уға һалҡын һыулы Ҡарабиҙәү, Ташъяр йылғалары ла ҡоя. Оҙонкүлдең үҙенән йылға булып ағып сыҡҡан һыуҙар Бирге Тирмән, Арғы Тирмән күлдәренә, унан Өскүлгә, шунан Биҙгенде, Ҡыҙыл, Яйыҡ йылғаларына барып ҡушыла.

Мәғрүр тауҙар, зифа ҡайындар ҡуйынына һыйынған Оҙонкүл ғәжәп матур. Баш яғында тау һырттары һыу ситенә үк килеп етә, ҡая таштары ла ҡалҡып тора. Көнсығыш, көнбайыш тарафтары яр буйҙары ғәмәлдә һөҙәк, йәм-йәшел сиҙәм, ҡомло, ташлы түбәлек. Хозурлыҡҡа хайран ҡалып, саф һауаһын һулап ләззәтләнеп ял итерлек, рәхәтләнеп һыу инерлек. ”Морат” торағы йәнәше, Оҙонкүл ауылына килеп еткән тирәһе һәм күлдең ағып ятҡан, Ҡылы тип йөрөтөлгән яҡтары — ерек, тал, ваҡ ҡайын, балан, муйыл, ҡарағат үҫкән күтер. Нығ батмаған, күрән үҫкән урындарында халыҡ бесән саба.

Күл тирәләй түбәләр байтаҡ. Ауыл эргәһендәгеләренең береһе Зыйыҡтүбә тип атала. Элекке уҡытыусы Ишмөхәмәт ағай Рамазановтың һөйләүенсә, Зыяитдин исемле үҫмер күтер күҙәүенә (тишек) сумған да күтер аҫтынан күлгә йөҙөп сығып, кире килгән. Шундай бер мәлдә һыу нығ болғанып, Зыяитдин күҙәүҙән сыға алмай мәрхүм булған. Исеме эргәләге түбәгә бирелгән. Уның һымаҡ сая йәштәр, киңлеге ике саҡырымдан ашыу күлде йөҙөп сыҡҡан ҡыҙҙар бар.

Әйткәндәй, Оҙонкүл буйындағы Оҙонкүл ауылы — Күбәләк ырыуы ауылдарының береһе. Олаталарынан ишетеүҙәренсә, бында тәүҙә ике балыҡсы: Байрас менән Түбәй килеп ултырған. Байрастың ҡатыны — Хәтирә, Түбәйҙеке — Аҡсаҡай. Хәтирә, Аҡсаҡай түбәләре лә бар. Уларҙың улдарының һәм ҡыҙҙарының заттары таралған. Оҙонкүл ауылында йәшәүселәрҙе ҡотсаламдар, әбделдәр, дауыттар, һары икмәктәр, бесәйҙәр, шәкәйҙәр араһына бүлеп йөрөткәндәр. Күлдең төньяҡ осонда Ҡойолдар ауылы ла булған, зыяраты әле лә төҫмөрләнә. Ҡаҙаҡтар ауылды яндырғас, ҡойолдарҙар Миндәк, Килмәк аръяғына күсенгән һәм хәҙер

ҙә ошонда ғүмер итә. Оҙонкүлдең ҡаршы ярында, йәғни көнсығыш яғында совет осоронда барлыҡҡа килгән Озерный тигән башҡорт ауылы урынлашҡан.

Ер аҫты һыуҙарынан, шишмәләрҙән туйынған Оҙонкүл әүәл тәбиғи рәүештә ағып ята. Был урын батҡыл булыу сәбәпле, таш түшәп, юл һалғандар. Инде тиҫтә-тиҫтә йылдар һыу ике ҙур торбанан ағып сыға. Шул саҡтан бирле сабаҡ һәм башҡа ваҡ балыҡтар үрләй алмай. Кешенең һыу яҡтылығының тәбиғи торошона йоғонтоһо һөҙөмтәһендә Оҙонкүлдә байтаҡ йылдар сабаҡ үрсемәй. Мәгәр күлдә табан, суртан күп, ҡара балыҡ, алабуға, ташбаш, йәнә һөләк бар. Элек шамбы ла булған. Яр буйында ҡабырсаҡтар күренгеләй, күл өҫтөндә аҡсарлаҡтар оса. Ҡамыш, тал баҫҡан, һиңкелдәп ятҡан күтерҙәрҙә ҡыр өйрәктәре бала сығара. Уларҙың именлеген һунарсылар боҙа, көҙөн мылтыҡтар дөмпөлдәп тора. Ҡасандыр кешеләрҙе һоҡландырып, аҡҡоштар ҙа йөҙөп йөрөгән. Һомғол ҡоштар, кешеләрҙән биҙеп, бөтөнләй күренмәй хәҙер. Күлгә төшкәндәрен Белорет халҡы атып алған. Тирә-йүндәге әҙәм үтмәгән һаҙлыҡтарҙа ғына сыңрау торналарҙың йөрәк тетрәткес тауыштары ишетелеп ҡала. Сыңрау-сеңләүҙәр рәнйетелгән тереклек донъяһы, үҫемлектәр донъяһы өсөн йән әрнеүе һымаҡ ишетелә.

## Балығы ил туйҙыра

Заманында Оҙонкүлдә балыҡсылыҡ артеле булған. Репрессия йылдарының ауырлығын кисергән зыялы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының береһе Хөснә Юлдыбаева ”Бирҙе донъя кәрәкте” тигән хәтирәләрендә был хаҡта ошолай яҙа: ”Артель эшселәре — эш һөйөүсән. Балыҡ сезонына әҙерлек ҡыҙыу бара. Был осорҙа көнмө, төнмө, иҫәпләшеп тормайҙар. Таһыллы балыҡсылар:

— Боҙ ҡалын. Һыуҙа балыҡ тынһыҙлана. Күлдә йылға һымаҡ итеп боҙ уйыуҙы тиҙләтәһең. Тынсыған балыҡ шунда эркелә. Шул саҡта һөҙгөс сүместәрең өлгөр булһын. Бәғзе төндәрҙә 10—15 тонна балыҡ тотола, — ти.

Әле, бөгөн төнөн балыҡ боҙ йылғаһына ағыласаҡ, тип ҡабаланалар. Шуға ла ал-ял белмәй эшләйҙәр. Ысынлап та төнөн сезон асылып китте. Ай уртаһы. Күл өҫтөндә төнөн энә эҙләһәң дә табырһың. Алдан ташбаш, сабаҡ, алабуға юл асты. Бер нисә көндән ҡара балыҡ, ҡыҙылғанат, суртан тығылды. Ҡамышлыҡ буйлап һыу асып, бала-саға, йәшелкенсәк, колхозсылар ижау менән һөҙөп, биҙрә тултырып балыҡ алып ҡайта. Балыҡ сығыуын ҡарарға килеүселәр ҙә мауығып китеп беҙҙең эшкә ҡушыла. Тирә-яҡта балыҡ тауҙары хасил була. Оло йәштәге балыҡсы һаҡал-мыйығынан туңған боҙҙо һыпыра-һыпыра:

— Бөгөнгә ярап торор. Тотҡан балыҡ өс тонна самаһы булыр, — ти.

— Иртәгә лә шулай күп сығырмы? — тип һорайым.

— Юҡ, — ти ағай, — әле балыҡ тын ала, хәҙер һауа етә. Ике-өс көндән тағы ла эркелер.

Ҡайһы бер сурағайҙарҙан ҡурҡып ҡасырһың. Йөккә тейәгәндә уңайлы булһын өсөн, уларҙы икегә, өскә сабып һалабыҙ. Балыҡты саналар-

ға тейәп, Миндәк руднигына алып барабыҙ. Ат булмаған саҡта балыҡ тауҙарына ҡарауылсы ҡуябыҙ. Бер генә ҡарауылсы булдыра алмай. Күл өҫтөн төлкө көтөүе килеп баҫа. Ауыл халҡы таяҡ менән төлкө һуғып ала.

Һуғыш йылдарында Оҙонкүлдең балығы, ғөмүмән, тәбиғәт байлыҡтары көнитмештең ышаныслы сығанағы булды. Ауыл халҡы ла астан интекмәне, шахтаның меңәрләгән эшсеһе лә талон менән балыҡ алды, күл кешене туйындырҙы...”

Эйе, әҙәм заты таш быуат осоронан бирле, меңәр йылдар буйы һәм әле лә Оҙонкүлдең балығы менән туҡлана. Хәҙер күл ”Башрыбхоз” идаралығына ҡараһа ла, ул балыҡ тотоу менән шөғөлләнмәй, һәүәҫкәр балыҡсылар ғына балыҡ ҡармаҡлай, браконьерҙар ғына ау һала.

Үткән быуаттың илленсе йылдарында Оҙонкүл буйына айыу ҙа килеп сыҡҡан. Бәлки, балығынан ауыҙ итергә теләгәндер. Кер йыуған ҡатын-ҡыҙ ҡурҡып, сыр-сыу килеп, ауылға йүгергән. Ир-ат айыуҙы атып алған. Итен бешереп ашағандар, төрлө ағзаларын им-дауаға ҡулланғандар.

## Батҡағы ла шифалы

Шишмә, йылға, диңгеҙ һыуҙарынан күл һыуы үҙенсәлекле термик режимы, минераллашыу кимәле, химик составының төрлөлөгө менән айырылып тора. Ағып төшкән һыуҙар минераль һәм органик матдәләр алып килә. Йәнә күл үҫемлектәре һәм тереклеге йәшәүҙән туҡтап, төбөнә органик ләм, мәте, йәғни сапропель булып ултыра. Ғалимдарҙың иҫәпләүенсә, бер мең йылда — бер-ике, ун мең йылда тиҫтәләрсә метр сапропель ҡатламы хасил була. Унда кальций, фосфор, тимер кеүек элементтар, кобальт, марганец, баҡыр, цинк, молибден, йод кеүек микроэлементтар бар.

Оҙонкүлдең шифалы батҡағын дауа өсөн байтаҡ йылдар Белорет металлургия комбинатының шифахана-профилакторийы ҡуллана. Ул хәрәкәт итеү, быуын, нерв системаһы, ашҡаҙан-эсәк юлы, тын алыу органдары, енси ағзалар, тире, ҡолаҡ ауырыуҙарына шифа. Урындағы халыҡ батҡағының шифаһын борондан уҡ белгән, уны алып аяҡ-ҡулдарына, биленә буяған, эҫелә күлдең батҡаҡлы урынына инеп торған. Күк балсығын да им-дауа өсөн файҙаланғандар. Күл мәрхәмәтле.

Һауыҡтырыу, һыуын сафландырыу өсөн Оҙонкүлде ләмдән, үләндән таҙартыу зарур. Таҙартһаң, гидрохимик хәл яҡшыра, балыҡ нығыраҡ үрсей. Ләме иһә баҫыуҙар өсөн дә һәйбәт ашлама.

## Әҙәмдәр миһырбанһыҙ

Оҙонкүлдең байлығы — сөсө һыу, шифалы батҡаҡ, күк балсыҡ, ашап туйғыһыҙ балыҡ, ҡондоҙ, һыу ҡоштары, йәнә ял йорто һалырлыҡ, туризм ойошторорлоҡ, сәләмәтлек бүләк итерлек хозур тәбиғәт. Һис шикһеҙ, күҙ ҡараһылай һаҡланырға тейешле хазина! Мәгәр беҙҙең

заман вәхшиҙәре уның һис кенә лә ҡәҙерен белмәй, һыуын, тирә-яғын бысрата, үҫемлектәр һәм тереклек донъяһын юҡҡа сығара.

Оҙонкүлгә яҙын, йәйен, көҙөн, айырыуса йома, шәмбе, йәкшәмбе көндәре белореттар килеп тула. Йәше, ҡарты, бала-сағаһы. Машиналарында: мылтыҡ, ау, кәмә... Палаткалар ҡороп, аҙналар буйы ятҡандар ҙа бар. Хәмер, көмөшкә, һыра эсәләр, теләгән ерҙә усаҡ яғалар, музыка уйнатып, көнө-төнө ҡоторалар. Яр буйы тулы араҡы, һыра шешәләре, һыу һауыттары, быяла ярсыҡтары, аш ҡалдыҡтары. Көтөүҙән һыйырҙар тояҡтарына ҡалай консерва банкаһы кейеп ҡайтҡылай. Ҡырағайҙар ауыл халҡының ҡаҙын, һарығын һуйып ашай, башмағын, аттарын урлай, атып алып китә. Ике аты бер юлы урланған һуғыш һәм хеҙмәт ветераны ҡайғыһынан, йәне әрнеүҙән ваҡыты етмәй мәрхүм булды. Яманлыҡтарын әйтеп бөтөрөрлөк түгел. Мәгәр вәхшилек ҡылыусыларҙы, ғәйеплеләрҙе ҡулға алып, язаға тарттырыусы юҡ. Ялыуҙар, зарланыуҙар һөҙөмтәһеҙ ҡала.

2004 йылда иғлан ителгән Тирә-яҡ мөхит йылы Оҙонкүлде урап үтте, уны ҡурсалау, һаҡлау буйынса урындағы хакимиәт тарафынан йоғонтоло саралар күрелмәне. Ҡырмыҫҡа иләүе һымаҡ машиналар мыжғып тора, үләнде тапайҙар, иҙәләр, сиҙәмдең таҡырын сығаралар. Улар күлдең ситенә үк килеп туҡтай. Көплө йөк машинаһы күлдең эсенә үк барып ингән, двигателенән май тамып тора. Хужаһының әйтеүенсә, ҡатыны Белорет ҡала советында эшләй. Күрәһең, уларға ни ҡылһа ла ярай. Бәғзеләре машиналары менән Моратта балалар һыу төшкән урынға уҡ инеп китә. Өҫкә менә яҙып баралар. Сисеп, кейем һалырлыҡ та урын ҡалмай. Ошонда уҡ ҡуна ятҡандары бар. Боронғо ”Морат” торағы эргәһендәге күтерҙе бәҙрәфкә, сүп-сар ояһына әйләндергәндәр. Берәү тәгәрмәс шинаһын яндыра, ҡара төтөн урғыла. Ауыл кешеләренең әйткәнен ҡолаҡтарына ла элмәйҙәр. Машиналарын күлдән ситкәрәк ҡуйыуҙарын, теләгән урында усаҡ яҡмауҙарын, һыра һауыттарын күлгә бырағытмауҙарын талап итһәң, ҡарышалар, әрләшәләр: ”Ял итергә ҡамасауламағыҙ! Кәйефте боҙмағыҙ! Тапаһа ни, был үләнде һин үҫтергәнме?” Белореттарҙың экологик аңының түбәнлеге, экологик культураға эйә булмауы, ҡырағайҙарса ҡыланышы аптырата. Был Белорет ҡалаһында экология буйынса йоғонтоло аңлатыу эше алып барылмауы, урындағы гәзиттәрҙә, радиола экологик сығыштарҙың, мәғлүмәттәрҙең аҙлығы тураһында һөйләй. Белорет ҡалаһынан беҙ әңгәмәләшкән кешеләр ”Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау тураһында” Федераль закон, Башҡортостан Республикаһының Экология кодексы, Һыу кодексы булыуын да белмәй. Ә бит Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 61-се статьяһында законлаштырылғанса, ”һәр кем тирә-яҡ мөхитте, тереклек һәм үҫемлектәр донъяһын һаҡларға, тәбиғәт байлыҡтарына һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға бурыслы”. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, замандаштарыбыҙ, ватандаштарыбыҙ үҙҙәрен тәбиғәттең бер өлөшө итеп тойоуҙан туҡтаған һәм тәбиғәтте, һулаған һауаһын, туйындырған ерен, эскән һыуын һанға һуҡмай, һаҡлаусы, хәстәрләүсе бурысын үтәмәй, аңһыҙлығы, яуапһыҙлығы арҡаһында тәбиғәткә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтерә.



## Яза

Тирә-яҡ мөхит менән кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе көйләүсе ҡағиҙәләр һәм сикләүҙәр диндәрҙә, уларҙың изге китаптарында, өгөт-нәсихәттәрендә лә билдәләнгән. Әйтәйек, Ҡөрьәндә һыу тере һыу һымаҡ күҙаллана: ”Беҙ бөтә тереклекте һыуҙан ялралттыҡ”. Тимәк, һыу — изге төшөнсә. Яратылыу серен үҙендә һаҡлаған һыуҙы исрафлауҙы ислам ҡырҡа тыя. Христиан динендәге боронғо доғаларҙың береһендә иһә былай тиелә: ”Өнһөҙ ер ыңрай һәм һыҡтай: ”Ни өсөн әҙәм балалары мине шул тиклем гонаһтары менән бысрата? Хоҙай һеҙҙе һаман ҡыҙғана, ә мине тамам язалай. Ниһайәт, аҡылығыҙға килегеҙ, ярлыҡау һорап Аллаға мөрәжәғәт итегеҙ”.

Гонаһ хупланмай, ул — яҙыҡ, ғәйеп эш. Гонаһлыларға гонаһ шомлоғо төшә, йәғни бәхетһеҙлек, бәлә килә. Әйтһәң, кеше ышанмаҫ, Оҙонкүл ҡыш буйы (2004—2005) үкһене, үкерҙе, тиҙәр. ”Ямanлыҡ, боҙоҡлоҡ самаларҙан ашты, был юҡҡа түгелдер, афәт булыр”, — тип юрағандар. Юрау ысынға тап килгәндәй, июль уртаһынан көндәр ҡороға китте, үләндәр шиңде, донъя саңға күмелде, ҡайындарҙың япраҡтары һарғайып ҡойола башланы. Тирә-яҡта йәшен йәшнәне, күк күкрәне, ямғырҙар ҡойҙо. Оҙонкүл өҫтөнән дә болоттар ағылды, ләкин яуманы. Ололар күккә бағып, ямғыр теләне. Ниҙер төшөндөрөргә, һабаҡ бирергә, иман уҡытырға теләгәндәй, күк сарсаған ергә им-шифа булыр һыуын төшөрмәне. Ниңәлер күл дә ямғырҙы тартманы. Шул мәлдә Белореттан килгән ял итеүселәрҙең ике балаһының береһе батып үлде.

Август башында шәмбе көн берәүҙәр бесәндән, икенселәр сейәнән ҡайтып, көтөү ҡаршылағандан һуң, ҡараңғы төшөр алдынан ғына Оҙонкүл өҫтөн ҡапыл ҡарағусҡыл-аҡһыл болоттар баҫты. Һәм, әйтерһең, күк ярылды... ҡойон ҡупты, һыу эре тамсылар булып түгел, ташҡын һымаҡ ҡойолдо, боҙ борсаҡ тондора башланы, йәнең сығыр шомға һалып, өс сәғәт самаһы дөбөрләтте, ағастарҙың япраҡтарын теткеләп бөттө, йорт эстәре, урам диңгеҙгә әйләнде. Тауҙарҙан ҡотороп аҡҡан һыу ваҡ таштарҙы, ағас-моғасты ағыҙҙы, тупраҡты, картуф баҡсаларын йыуҙы. Был мәхшәрҙән кешеләрҙең ҡото осто, бына-бына өйҙәр ағып китер һымаҡ тойолдо. Һыу уйһыуҙа ултырған йорттарҙың нигеҙҙәренән ашты, баҙҙарына тулды. Ахыры заман еткән һымаҡ ине. Туҡтауһыҙ йәшен атты, күк емерелерҙәй булып гөрһөлдәне, ут һүнде.

Оҙонкүл буйында ял итеп ятыусылар ошо ғәрәсәт эсендә ҡалды. Сиҙәмгә аунаған иҫеректәрҙе боҙ түпәләне, торам тигәндә ҡолатып, бит-ҡулдарын, баштарын ҡанға батырҙы. Ҡойон баҫылғас, ташҡын кәмегәс, беҙҙең йортҡа ике ҡатын йүгереп инде һәм һөрән һалды: ”Белорет урыҫтары бәләгә тарыған, ярҙам итегеҙ!” Машинабыҙҙы ҡабыҙып, шул урынға ашыҡтыҡ. Ҡәҙимге ваҡытта аша атлап сығырлыҡ Көсөкбай йылғаһы ныҡ ташҡан, һыуы урғылып аға. Бер нисә автомобиль фараларын яндырып ултыра. Оло йәштәге урыҫ рулгә башын һуғып үкһей, бәпесен ҡосаҡлаған йәш ҡатын да һыҡтай. Шуны белдек: урыҫтың улы, йәш ҡатындың ире — егерме бер йәшлек ир-егет юл ҡарарға төшкән. Ул бата, ҡысҡыра башлағас, улын ҡотҡарырға әсәһе атлыҡҡан һәм... икеһен дә торбаға аҡҡан һыу һурып алған. Башҡалар: ”Һыуландыҡ, өшөнөк, фатирға урынлаштырығыҙ”, — тип үтенә. Урынлаштырҙыҡ. Бәлә тураһында кәрәҙле телефондан Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығына хәбәр иттек. Белореттан килеп, мәрхүмдәрҙең мәйеттәрен таптылар — торбаға тығылғандар. Ҡыҙғаныс та, йәл дә. Бик үтенгәстәре, урыҫтарҙың бер нисәһен хәүефһеҙ тау һырты юлы буйлап, Верхнеуральск юлына сығарҙыҡ. Төн буйы йоҡламаныҡ.

Иртәгеһен бер машинаны ташҡын күлгә ағыҙып төшөрөүен һөйләнеләр. Икенсеһе яртылаш һыу эсендә ҡалып боҙолған, Белоретҡа тағып алып киттеләр. Ташҡын ҡом өйөмдәре хасил иткән, үләндәрҙе ергә һылаштырған, аҙбар эргәләрендә — ярты метр боҙ. Боронғо доғалағы һымаҡ, Оҙонкүл: ”Ни өсөн әҙәм балалары мине гонаһтары менән шул тиклем бысрата? Ниһайәт, аҡылығыҙға килегеҙ!” — тигәндәй. Ҡот осҡос ҡойон, бәлә-ҡаза, ҡайғы — ҡылған гонаһ, ҡырағайлыҡ өсөн яза һымаҡ. Йәнәштәге Ҡаҙаҡкол, Озерный, Ҡобағош ауылдарында боҙ булмаған, фәҡәт Оҙонкүл өҫтөндә генә тороп яуған. Ғәжәп бит, ғәжәп, аҡылға һыймаҫлыҡ хәл-күренеш...

## Нишләргә?

Уралыбыҙҙың күк ынйыһы Оҙонкүл барлыҡҡа килеүе үҙенсәлекле гидрологик, гидрохимик режимы, үҫемлектәр һәм тереклек донъяһының төрлөлөгө, шифалы батҡағы, балсығы, таш быуат кешеләренең йәшәүе, йәшмә эшкәртеүе менән ҙур әһәмиәткә эйә. Шуға ла күл тирәләй 200—300 метр киңлегендә һаҡлыҡ зонаһы булдырыу, үҫемлектәрен тапамау, ағаслыҡтарын ҡырҡмау, яр буйҙарын бысратмау, уны дәүләт ҡурсалауына алыу зарур. Америкала, Югославияла, Японияла һәм башҡа сит илдәрҙә күлдәр милли ҡурсаулыҡтар, парктар ҡарамағына инә. Башҡортостаныбыҙҙа Асылыкүлде, Яҡтыкүлде, Өргөндө һаҡлаған кеүек, йәнтөйәгебеҙҙең бер тере күҙәнәге булған Оҙонкүлде лә һаҡларға бурыслыбыҙ.

Оҙонкүлдең тәбиғәт ҡомартҡыһы булыуы тураһында яҙыуҙар, һыу яҡылығына машиналарҙа яҡын барырға ярамауҙы иҫкәрткән билдәләр ҡуйыуға әллә ни ҙур сығым кәрәкмәй. Ғөмүмән, Оҙонкүл буйында мәҙәни ял, туризм ойоштороу, машиналарҙы ҡуйыу, усаҡ яғыу, палат-

калар ҡороу урындарын билдәләү, ял иткән, балыҡ тотҡан өсөн аҡса түләтеү, танытмалар биреп, күҙәтеүселәр, ҡарауылсылар ҡуйыу мөһим. Кешеләргә эш урыны булыр, урындағы хакимиәткә төшөм керер ине. Әйтәйек, Шүлгәнташ мәмерйәһен, Арҡайым тәбиғәт музейын ҡарау түләүле. Әүәл Оҙонкүлдең баш яғында ял итергә килеүселәрҙе ҡабул итеү йорто, ҡарауылсыһы Әнүәр ағай Абдрахманов булған бит. Заманса ял итеүҙе ойоштороу тураһында Учалы ҡала һәм район хакимиәтендә ошондай һөйләшеү булды.

— Оҙонкүлдең әлеге хәле ауыл халҡын ҡәнәғәтләндерә, — тинеләр унда. — Ял йорто төҙөү өсөн бер эшҡыуар урын һорағайны, ҡаршы төштөләр. Шунан һуң, күл "Башрыбхоз" идаралығына ҡарай.

— Нисек кенә булмаһын, Оҙонкүл яҡлауға, һаҡлауға мохтаж, ул — Учалы районы биләмәһендә. Уның яҙмышына битараф ҡалыу ярамай. Килеүселәрҙең ҡырағайҙарса мөнәсәбәтенә сик ҡуйыу, мәҙәни һәм түләүле ял ойоштороу — көнүҙәк мәсьәлә.

— Күктән ергә төшөгөҙ, был мөмкин түгел, күпме көс, сығым...

— Оҙонкүл бит күктә түгел, ерҙә. Һеҙ үҙегеҙ ергә төшөгөҙ. Башҡортостаныбыҙҙың байтаҡ райондарында быуалар быуып, ял йорттары һалалар. Ә Оҙонкүл — Хоҙай бүләк иткән хазина!..

Шуның менән әңгәмә тамамланды. Хакимиәттең Башҡортостан Республикаһының Конституцияһы, Һыу кодексы, Экология кодексы закондарын, талаптарын үтәүгә, "Экология һәм Башҡортостан Республикаһының тәбиғәт ресурстары (2004—2010 йылдар)" республика маҡсатлы программаһын ғәмәлләштереүгә вайымһыҙлығы йәнә бер һиҫкәндерҙе. "Башрыбхоз" идаралығына һылтаныу ҙа нигеҙһеҙ. Быны идаралыҡ башлығы Минитдин Нуретдин улы Шафиҡовтың әйткәне лә раҫланы.

— Беҙҙең тарафтан Оҙонкүл үҙләштерелмәй, унда балыҡ тотоу бригадабыҙ юҡ. Күлдең дөйөм торошо өсөн беҙ яуаплы түгел, яр буйҙары тирәләре лә беҙгә ҡарамай. Унда контроль, күҙәтеү булдырыу вәкәләтлеге беҙгә бирелмәгән. Был эш менән урындағы хакимиәт органдары шөғөлләнергә тейеш, — тине ул.

Эйе, Оҙонкүлдең яҙмышы, киләсәге тураһында иң тәүге сиратта урындағы хакимиәт органдары ҡайғыртырға, уны тәбиғәт ҡомартҡыһы итеп иғлан итеүҙе хәстәрләргә тейеш. Мәгәр ҡайғыртырға, саралар күрергә теләмәйҙәр. Заманыбыҙҙың әхлаҡи проблемаларын күтәргән Валентин Распутин яҙғанса, тәбиғәт тураһында хәүеф һис ҡасан да бөтмәйәсәк, әгәр бөтә икән — фәҡәт тәбиғәт менән бергә генә.

Шулай, күрәһең. Минең күңелемдә лә ғүмерем буйы тәбиғәт, ғәләм менән кешенең аһәңле йәшәмәүе, урман, ер-һыу яҙмышы өсөн хәүеф бөтмәй. Оҙонкүл дә берсә тып-тын ята, берсә шаулап, сыбарланып, тулҡындарын ҡаға. Өнһөҙ, тиһәк тә, хәүефле төҫтә геүләй, иңрәй, өҙләй. Ә Оҙонкүлгә һыуын ҡойған бәләкәй генә Көсөкбай йылғаһы буйында ниндәйҙер ғилләә менән август аҙағында муйыл сәскә атҡан...